**Телмәр үҫтереү буйынса ойошторолған белем биреү эшмәкәрлеге "Һуңғы көҙ"**
**(4-5 йәш)**

**Тәрбиәсе:СафинаЮ.Ю.**

**Эшмәкәрлек төрө:** танып белеү
**Маҡсат:** балаларҙа һуңғы көҙ миҙгеле, ҡышлаусы һәм күсмә ҡоштар тураһында төшөнсә формалаштырыу;
**Бурыстар:** кескәйҙәрҙең  көҙ миҙгеле тураһында белемдәрен тәрәнәйтеү, һуңғы көҙҙөң билдәләре тураһында белем биреү.
Һүҙлек запасын байытыу, балаларҙың бәйләнешле телмәрҙәрен, ижади һәләтен үҫтереү. Миҙгелгә ҡарата ихтирам тәрбиәләү.
**Йыһазландырыу:** магнитлы таҡта, мнемотаблица.
**Һүҙлек эше:** һуңғы көҙ, күсер ҡоштар, ҡышлаусы ҡоштар.
**Методтар һәм алымдар:** әңгәмә, һорауҙарға яуап биреү, мнемотаблица менән эшләү, дидактик уйындар, йомаҡ сисеү**.**
**Алдан башҡарылған эш:** мәҡәлдәр өйрәнеү, шиғырҙар ятлау, уҡыу, йомаҡтар сисеү, схема буйынса һөйләү,  "Көҙ килгән" шиғырын ятлау.
**Ойошторолған белем биреү эшмәкәрлеге барышы:**
**Тәрбиәсе** көҙ тураһында шиғыр һөйләй:
Ағастарҙың ҡоро япраҡтары
Унда-һанда ғына ҡалдылар.
Ҡоштар осоп киткәс, яландары
Йоҡлағандай шымға талдылар.
-Балалар, йә, әйтегеҙ әле, ҡайһы миҙгел тураһында һүҙ бара?
**Балалар:**
-Көҙ миҙгеле тураһында.
**Тәрбиәсе:**
-Дөрөҫөн әйткәндә, көҙ аҙағы, йәғни һуңғы көҙ тураһында һүҙ бара. Ысынлап та, ағастарҙа япраҡтар бик аҙ ҡалып бара. Тағы ла, "...ҡоштар осоп киткәс, яландары йоҡлағандай шымға талдылар" тигәндә нимә аңлашыла? Һуңғы көҙҙөң ниндәй билдәһе тураһында әйтеп үтелә?
**Балалар:**
-Ҡоштарҙың йылы яҡҡа осоп китеүҙәре тураһында.
**Тәрбиәсе:**
-Тап шулай. Йылы яҡҡа осҡан ҡоштарҙы беҙ күсер ҡоштар тип атайбыҙ. Был беҙҙең бөгөн өйрәнәсәк яңы һүҙ. Әйҙәгеҙ, бергәләп ҡабатлап, иҫтә ҡалдырайыҡ әле уны. (Күсер ҡоштар һүҙен бергәләп ҡабатлау).
-Әйҙәгеҙ, хәҙер күсер ҡоштарҙы һанап үтәйек: торна, кәкүк сыйырсыҡ, һандуғас, ҡара ҡарға, аҡҡош.
***(Һәр береһенең һүрәтен магнитлы таҡтаға элеп барыу)***
-Беҙҙә ҡышларға ҡалған ҡоштарҙы нисек атап йөрөтәләр?
**Балалар:**
-Ҡышлаусы ҡоштар.

**Тәрбиәсе:**
-Дөрөҫ, ҡышлаусы ҡоштар тип атала. Әйҙәгеҙ, уларҙың атамаларын да иҫкә төшөрөп китәйек.
**Балалар:**
-Күгәрсен, турғай, тумыртҡа, ҡыҙылтүш турғай. (Уларҙы ла магнит таҡтаға элеп, атамаларын ҡабатлап баралар)
-Ә хәҙер һеҙҙең менән бармаҡ уйыны уйнап алайыҡ.
**Бармаҡ уйыны:**
Мин ҡоштарҙы яратам
Тәмле емдәр ашатам
Ememде суҡый ҡоштар
Һикереп уйнай улар.
Сәп -сәп- сәп итәм
Ҡоштарым осоп китә.
**Дидактик уйын: « Күсмә һәм ҡышлаусы ҡоштар»**
Балалар, әйтегеҙ әле, ҡоштар ҡайҙа йәшәйҙәр, ҡайҙа беҙ уларҙы осрата алабыҙ? ( урманда, йылға - күлдәрҙә, ҡалала һ.б)
-Афарин, балалар. Хәҙер бөтәбеҙ ҙә баҫып торайыҡ һәм **физминутка** эшләйек:
Ҡаҙҙар кеүек осайыҡ,
Ҡоштар кеүек осайыҡ.
Ҡуян кеүек һикерәйек,
Айыу кеүек атлайыҡ,
Аттар кеүек еләйек,
Бесәй кеүек һуҙылайыҡ,
Урындарға ултырайыҡ!
-Балалар, көҙ көнө һауа торошо нисек үҙгәрә?
**Балалар:**
-Көндәр һыуыта. Һалҡын елдәр иҫә. Ямғырҙар яуа. Кешеләр йылы кейем кейә.
**Тәрбиәсе:**
-Дөрөҫ. Ә ел нисек шаулай?
**Балалар:**
-Ш-ш-ш (“Ш” өнөн нығыталар)
**Тәрбиәсе:**
-Хәҙер бөгөн алған белемебеҙҙе туплап мнемотаблицаға ҡарап, кескәй генә хикәйә төҙөйөк:
Һуңғы көҙҙә ҡояш аҙ йылыта. Көндәр болотло. Ямғырҙар йыш яуа. Кешеләр йылы кейенеп, ҡулсатыр алып йөрөйҙәр. Ағастарҙа япраҡтар ҡойолоп бөтә. Ҡоштар йылы яҡҡа оса.
-Афарин, балалар. Әйҙәгеҙ, һуңғы көҙҙө һүрәттәребеҙҙә лә сағылдырып үтәйек. (Үҙ аллы һүрәт төшөрәләр).
-Балалар, һеҙгә бөгөнгө дәрес оҡшанымы? (Балаларҙың яуаптары). Миңә лә һеҙҙең дәрестә яуаптарығыҙ, ҡатнашыуығыҙ бик оҡшаны. Рәхмәт, һеҙгә. Тәбиғәтебеҙҙең һәр миҙгелен, ҡоштарын, кейектәрен, ағас-ҡыуаҡтарын ҡәҙерләп, һаҡлап йәшәйек!